Без үҙебеҙ – әйләләр

# Йәйғор

№ 3

2001 йылдың
25 майынан
сыға

2001 йыл
7 декабрь, йома.

Дыуан районы Республика лицей-интернаты гәзите

## Гәзитебеҙҙең был һаны Дыуан районы Республика лицей-интернатында үткән Салауат районы фестиваленә арнала.



20 ноябрҙән 7 декабргә тиклем беҙҙең мәктәптә Салауат районы фестивале үтте. Мәктәптә төрлө саралар үткәрелде. Иншалар, һүрәттәр конкурсы уҙғарылды. Салауат районы уҡыусылары араһынан «Иң яҡшы уҡыусы» исеменә лайыҡ булған уҡыусы һайлап алынды.

Ә бына бөгөн беҙҙә ҡунаҡта Салауат районы хакимиәт вәкилдәре һәм мәктәп директорҙары. Улар мәктәп һәм дөйөм ятаҡ шарттары, интернаттың материаль базаһы, уҡыу һәм тәрбиә эшенең торошо менән танышасаҡ.

Лицей уҡытыусыларының эш тәжрибәһен өйрәнеү өсөн ҡунаҡтар асыҡ дәрестәр ҡараясаҡ. Ә «Ынйыҡай» бейеү ансамбле һәм лицейҙың йәш талантттары ҡунаҡтарҙы концерт программаһы менән тәбрикләйәсәк.

Фестивалдә ҡатнашыусыларға уңыштар теләйбеҙ!

## Салауаттың данлы иле.




Башҡортостандың Салауат районы 1935 йылда ойошторолған. Майҙаны—2182 кв.км. 1988 йылдың 1 ғинуарына халҡы һаны 30,2 мең кеше тәшкил итә.

Төньяҡ-көнбайыштан көньяҡ көнсығышҡа табан (Урмантауҙан Первомай ҡасабаһына тиклем) 100 км.-ға һуҙылған, ә сиктәренең периметры—380 км. самаһы тәшкил итә. Майҙаны буйынса Салауат районы Лихтенштейн кенәзлегенән 15 тапҡырға, Мальта республикаһынан 7 тапҡырға ҙурыраҡ.

Район территорияһында ике ҙур йылға аға: Йүрүҙән һәм Әй. Иҙрис ауылынан Ташауылға тиклем Йүрүҙәндең оҙонлоғо 205 км.

Мөһабәт Ҡаратауҙың көньяҡ битләүе йүкә, имән, ҡатнаш үҫкән ҡайын, уҫаҡ һәм ҡарағай урмандары менән ҡапланһа, Төньяҡ битләүендә шыршы, пихта, ҡарағай урмандары өҫтөнлөк итә. Район территорияһында халыҡ медицинаһында ҡулланыла торған 200 төрҙән ашыу дарыу үләндәре үҫә. Шулай уҡ урмандар еләккә, бәшмәккә бай. Хайуандар доньяһы ла бай һәм күп төрлө.

Тәбиғәт районға һирәк осрай торған ҡомартҡылар—Ҡорғаҙаҡ шишмәһен һәм Янғантауҙы бүләк иткән. Бынан тыш «Салауат», «Яҡташ өйө» һәм башҡа мәмерйәләр ҙә үҙенә күрә тәбиғәттең ҡабатланмаҫ композицияһын тәшкил итә. Уникаль тәбиғәт күренештәренә Дыуан районы менән сиктәш урынлашҡан Сабаҡайташ һәм Лаҡлы эргәһендәге Ҡапҡаташ ҡаялары ла инә.